# Ш а һ и б а р а к

Шаһибарак Бикколь ауылының байҙа эшләп йөрөгән батрак егете була. Байҙарға һыймаған. Аҙактан байҙар малын урлап, уларҙан үс алып йөрөгән. Шулай йөрөгән сағында уның урынына икенсе бер кешене тоткан булалар. Ә Шаибарак үҙе бик кыйыу, һис бер кемгә тотолмаҫ каскын була. Тик ул үҙенең катыны тарафынан тотторола. Ша/ибарак кулға алынғандан һуң Себергә, вольное поселениегә ебәреlә. Аҙактан Шаибаракты үҙенең якташтары 1904-1905 йылғы рус-япон һуғышында күрәләр. Ул батыр һуғышсы була.

Шаһибаракты бик оҫта йырсы, бик шәп курайсы егет булған тип һөйләйҙәр. Бикколь ауылы эргәһендәге бейек тау башына менеп, һәр сак курайҙа уйнап, үҙенең йырҙарын йырлап ултыра торған булған.

"Шаһибарак" йырын Ташбулат Байым ауыл Советтәренә караған ауылдарҙа йырлайҙар. Бикколь ауылында уның якындары Барановтар йәшәй.

Йырҙары Ташбулат ауылында Ғәлләм Хисмәтовтан, Иәнекәй ауылындағы 78 йәшлек Малбай Дауытовтан яҙып алынды.

12-14 /YШ- 1952.

Аналыкай буйы
Сэсте тумар
Үрткә генә яна барҙанып;
Үҙ китеүемә һис кайғым юк,
Дуҫ-иштәрем кала ҙарҙанып.

Мендем генә Шоңкар әй башына,
Аллаһәүлә яҙҙым ташына;
Һис берәүкәйҙәрҙән мин күрмәйем,
Кул һөнәрем етте башым.

Иртә менән тороп әй караһам,
Күренеп ята Верхне-Урал калаһы;
Шаһибарак китеп, уғры бөтөп,
Ишәйер микән йылкы балаһы.

Иртәнсәкәй тороп әй караһам,
Күренеп ята һөргән ерҙәрем;
Ғакыл менән уйлап карағыҙсы:
Кайҙа заманалаш ирҙәрем?

------

Киблаларҙан иҫкән екәт елгә
Елберҙәйҙер Шоңкар сауылы;
Шаһи меҫкен китеп, уғры бөтөп,
Байығыр микән Бикколь ауылы.

Югереп мендем шоңкар башына,
Исемемде яҙҙым ташына;
Ниҙәр генә килеп, ниҙәр китмәй
Ир егеткәйҙәрҙең башынан?

Аналыкай һыуҙың камышы калын,
Киблаларҙан иҫкән ел үтмәй;
Кайғырма ла башым, акма йәшем,
Изге еркәйенән кем китмәй?